Учредителдәрҙең 2018 йылдың
08 февралендә үткән дөйөм
йыйылышы ҡарары менән
РАҪЛАНДЫ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН ҺАҠЛАУ ҺӘМ ҮҪТЕРЕҮ БУЙЫНСА АВТОНОМИЯЛЫ КОММЕРЦИЯҒА ҠАРАМАҒАН ОЙОШМАНЫҢ

# УСТАВЫ

Өфө 2018

## I. Дөйөм ҡағиҙәләр

1.1. Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошма (артабанғы исеме – “Ойошма”) – ул ағзалығы булмаған, унитар коммерцияға ҡарамаған, ошо Уставта (артабан – Устав) ҡаралған маҡсатҡа ирешеү өсөн ихтияри нигеҙҙә мөлкәт взносы һәм башҡа ғәмәлдәге ҡануниәт тарафынан тыйылмаған керем нигеҙендә төҙөлгән ойошма.

1.2. Ойошма Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына, Башҡортостан Республикаһы Конституцияһына, Рәсәй Федерацияһының Граждандар кодексына, 1996 йылдың 12 ғинуарынан “Коммерцияға ҡарамаған ойошмалар тураһында” 7-се һанлы Федераль законына һәм башҡа башҡорт телен һаҡлау, популяштырыу һәм үҫтереү мәсьәләләрен хәл итеүгә йүнәлтелгән Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһының норматив-хоҡуҡи акттарына, шулай уҡ ғәмәлдәге Уставҡа ярашлы рәүештә төҙөлә һәм эшмәкәрлеген алып бара.

1.3. Рус телендә ойошманың тулы атамаһы – Автономная некоммерческая организация по сохранению и развитию башкирского языка.

Рус телендә ойошманың ҡыҫҡартылған атамаһы – Фонд по сохранению и развитию башкирского языка.

Башҡорт телендә ойошманың тулы атамаһы – Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошма.

Башҡорт телендә ойошманың ҡыҫҡартылған атамаһы – Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды.

Инглиз телендә ойошманың атамаһы – The Baschkir Language Preservation and Development Fund.

1.4. Башҡортостан Республикаһы исеменән Ойошманың учредителдәре булып Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы, Башҡортостан Республикаһы Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, Башҡортостан Республикаһының Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы. Башҡортостан Республикаһының Халыҡтар дуҫлығы йорто дәүләт бюджет учреждениеһы (артабан – Учредителдәр) вәкиллек хоҡуғын башҡара.

1.5. Дәүләт теркәүенән башлап Ойошма юридик шәхес хоҡуҡтарына эйә. Ойошманың эшмәкәрлек осоро сикләнмәгән.

Ойошма үҙ атамаһын сағылдырған мисәт, штамп, бланктар һәм башҡа визуаль идентификация сараларын булдыра ала.

1.6. Ойошманың урынлашҡан ере: 450015, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 43.

2. Ойошманың маҡсаты, эшмәкәрлегенең предметы һәм төрҙәре

2.1. Ойошма башҡорт телен һаҡлау, популярлаштырыу һәм үҫтереүгә ярҙам итеү мөмкинлеген булдырыу маҡсатынан сығып төҙөлә.

2.2. Ойошма эшмәкәрлегенең предметы:

- Уставта ҡуйылған маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән проекттарҙы һәм программаларҙы тормошҡа ашырыу, яҡлау;
- Ойошма тарафынан тормошҡа ашырылған проекттарҙы һәм программаларҙы кәрәкле финанс ресурстары менән тәьмин итеү;
- Уставта ҡуйылған маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуҙа дәүләт һәм муниципаль хакимиәт органдары, милли-мәҙәниәт йәмәғәт берекмәләре һәм ижади берләшмәләрҙең үҙ-ара килешеп эш итеүенә булышлыҡ итеү;
- Уставта ҡуйылған маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыуҙа күрһәткән әһәмиәтле хеҙмәтенә ҡарап, айырым кешеләрҙе һәм ойошмаларҙы бүләкләп дәртләндереү;
- Уставтың маҡсаттарын тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән халыҡ-ара һәм төбәк-ара хеҙмәттәшлек һәм бәйләнеште үҫтереүгә булышлыҡ итеү;
- башҡа коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙың маҡсатҡа ярашлы программаларын финанслауға булышлыҡ итеү;
- Уставтың маҡсаттарына ярашлы социологик тикшеренеүҙәр үткәреүгә булышлыҡ итеү;
- Уставтың маҡсаттарын тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән программа һәм проекттарҙы эшләү һәм тикшереү буйынса ойошмаларға һәм граждандарға консультация биреү, ойоштороу-методик ярҙам күрһәтеү;

2.3. Ойошма үҙенең устав маҡсаттарын тормошҡа ашырыуҙа түбәндәгеләргә хаҡлы:

- ресустарҙы йәлеп итеү эшмәкәрлеге менән шөғөлләнергә;

- хужалыҡ ойошмалары һәм башҡа коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙы төҙөргә, берләшмә һәм ассоциацияларға инергә;
- халыҡ-ара һәм төбәк-ара программа һәм килешеүҙәрҙе тормошҡа ашырыуҙа ҡатнашырға;
- Ойошма бүлгән финанс сараларын маҡсатлы файҙаланыуҙы контролдә тоторға, ә уларҙы маҡсатлы ҡулланыуҙа етешһеҙлектәр фашланһа, финанс сараларын кире ҡайтартырға йәки эште туҡтатыу тураһында ҡарар сығарырға;
- килешеүҙәр төҙөргә, мөлкәт һатып алырға һәм ҡуртымға алырға, юридик һәм физик шәхестәр менән башҡа граждандлыҡ-хоҡуҡи бәйләнешкә инергә;
- ғәмәлдәге ҡануниәт тарафынан ҡуйылған тәртиптә Рәсәй Федерацияһы территорияһында Ойошманың филиалдарын һәм вәкиллектәрен асырға;
- ғәмәлдәге Уставҡа ярашлы төҙөлгән Ойошманың структур бүлексәләрен бағырға;
- устав маҡсаттарын тормошҡа ашырыу өсөн, хужалыҡ берекмәләрен төҙөп йәки төҙөүҙә ҡатнашып, эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге алып барырға;
- үҙ исеменән договорҙар һәм башҡа төрлө килешеүҙәр төҙөргә, милекле һәм милке булмаған хоҡуҡтарға, бурыстарға эйә булырға, судта яуап биреүсе һәм дәғүәсе булырға;
- ғәмәлдәге Устав билдәләгән маҡсатҡа ярашлы мөлкәтте ҡулланырға;
- Уставтағы маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн дәүләт власы һәм урындағы үҙидаралыҡ органдарының ҡарарҙарын булдырыуҙа ҡатнашырға.

2.4. Учредителдәр Ойошманың йөкләмәһе буйынса яуап бирмәй. Ойошма үҙ Учредителдәренең йөкләмәләре буйынса яуап бирмәй. Дәүләт Ойошманың йөкләмәләре буйынса яуаплылыҡ тотмай. Ойошма дәүләт йөкләмәләре буйынса яуаплылыҡ тотмай.

2.5. Ойошма тарафынан башҡарылған килешеү Устав билдәләгән эшмәкәрлек маҡсатына ҡаршы килгән булһа, ҡануниәт билдәләгән тәртиптә Ойошманың юғары етәкселек коллегиаль органы ҡарары менән килешеү ғәмәлдән сыҡҡан (яраҡһыҙ) тип танылырға мөмкин.

## 3. Ойошманың мөлкәте

3.1. Устав менән билдәләнгән маҡсатты тормошҡа ашырыу өсөн Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтенә ярашлы Ойошма үҙ мөлкәтенә хужа булыуға, уның менән файҙаланыуға һәм эш итеүгә хоҡуғы бар.

3.2. Ойошма үҙенең мөлкәтендә биналар, ҡоролмалар, торлаҡ фонды, йыһаздар, юл транспорт саралары, инвентарҙар, сит ил валютаһы һәм һумлыҡ аҡса саралар, ҡиммәтле ҡағыҙҙар, интелектуаль милек объекттары һәм башҡа милек, шулай уҡ ғәмәлдәге Устав менән ҡаралған эшмәкәрлекте тормошҡа ашырыу өсөн, үрҙә һаналып киткән милектең бар төрөн булдырыу хоҡуғына эйә.

3.3. Ойошма үҙенең мөлкәтенә Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтендә ҡаралған шелтә йөкләмәләре һалынған осраҡта, үҙенең милеге менән яуап бирә.

3.4. Учредителдәр тапшырған милек Ойошманың шәхси милеге булып тора. Ойошманың Учредителдәре Ойошмаға тапшырылған милеккә дәғүә итә алмай.

3.5. Ойошма Рәсәй Федерацияһы территорияһында һәм унан ситтәге банктарҙа үҙенең үҙаллы балансына, иҫәп һәм башҡа счеттарына (шул иҫәптән валюта счеттарына) эйә.

3.6. Аҡсалата һәм башҡа формаларҙа Ойошма милегенең сығанаҡтары:

- Ойошма Учредителдәренән даими һәм бер тапҡыр бирелә торған керем;
- үҙ ирке менән бирелгән милек взностары һәм башҡа төрлө ярҙам;
- акция, облигация һәм башҡа ҡиммәтле ҡағыҙҙарҙан килгән дивиденттар (килем, проценттар);
- тауар, хеҙмәттән килгән керем;
- Ойошманың милегенән килгән килем;
- Закон менән тыйылмаған башҡа килем.

3.7. Ойошмаға килгән килем Ойошманың Учредителдәре араһында бүленмәй.

## 4. Ҡыҙыҡһыныусы заттар

4.1. Ойошма менән берәй эш башҡарырға, шул иҫәптән башҡа ойошмалар йәки граждандар менән килешеү төҙөүҙә ҡыҙыҡһынған заттар тип (артабан – ҡыҙыҡһыныусы заттар), Ойошманың коллегиаль органдарының ағзалары – Ойошманың дөйөм йыйылышы, Попечитель советы һәм Ойошма директоры, әгәр был заттар ойошма һәм граждандар менән хеҙмәттәшлек итһә, ойошманың кредиторҙары булһа, йәки туған булһа, йәки граждандардарҙың кредиторҙары булһа, Ойошма тарафынан барлыҡҡа килтерелгән милеккә тулыһынса йәки өлөшләтә эйә булған ойошма һәм граждандар, йәки Ойошманың милегенән табыш ала алыусы заттар ҡыҙыҡһыныусы заттар таныла.

4.2. Ҡыҙыҡһыныусы заттар Ойошманың эшмәкәрлек маҡсатына бәйле мәнфәғәттәрҙе үтәргә, Ойошманың мөмкинлектәрен Ойошманың Учредитель документтарында ҡаралған маҡсаттарҙан тыш файҙаланыуҙы йәки башҡа сит маҡсатта ҡулланыуҙы рөхсәт итмәҫкә бурыслы.

4.3. Ойошма менән ҡыҙыҡһыныусы зат килешеү төҙөргә теләк белдерһә, шулай уҡ күрһәтелгән зат һәм ойошма араһында килешеү төҙөү буйынса башҡа ҡаршылыҡтар осраған хәлдә:

- килешеү төҙөгәнгә тиклем ҡыҙыҡһыныусы зат Ойошма менән ҡыҙыҡһыныуы тураһында еткерергә бурыслы;

- Ойошма Учредителдәренең Дөйөм йыйылышы тарафынан килешеү хупланырға тейеш.

4.4. Шәхси мәнфәғәттәрен күҙ уңында тотоп, 4.1, 4.2, 4.3 пункттарының талаптарын боҙған йәки ҡыҙыҡһыныусы заттар башҡарған килешеү суд тарафынан яраҡһыҙ тип танылырға мөмкин.

4.5. Ойошмаға килтергән зыяндың хаҡын ҡыҙыҡһыныусы зат ҡапларға бурыслы. Әгәр был зыян бер нисә кеше менән башҡарылһа, улар Ойошма алдында тигеҙ яуап бирә.

## 5. Филиал һәм вәкиллектәр

5.1. Ойошма Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтенә ярашлы Рәсәй Федерацияһы территорияһында үҙенең филиалдарын һәм вәкиллектәрен аса ала.

5.2. Ойошманың филиалдары булып ойошманан айырым ерҙә урынлашҡан һәм уның бөтә функцияларын, шул иҫәптән вәкиллек функцияһын үтәгән айырым бүлексә тора

5.3. Ойошманың вәкиллеге булып ойошманан айырым ерҙә урынлашҡан һәм уның мәнфәғәтен яҡлаған айырым бүлексә тора

5.4. Филиалдар һәм вәкиллек Ойошманың юридик шәхес хоҡуҡтарына эйә түгел, уларға Ойошманың милеге бүлеп бирелә һәм раҫланған Положение нигеҙендә эш итә. Филиалдарҙың һәм вәкиллектәрҙең милеге айырым баланста һәм Ойошманың балансында тора.

Филиал һәм вәкиллек етәкселәре Ойошма тарафынан тәғәйенләнә һәм Ойошма күрһәткән ышаныс нигеҙендә эш итә.

5.5. Филиал һәм вәкиллектәр Ойошма исеменән эш итә. Ойошма үҙенең филиал һәм вәкиллектәренең эшмәкәрлеге өсөн яуаплы.

## 6. Ойошманың идаралыҡ органдары

6.1. Ойошманың идаралыҡ органдары булып түбәндәгеләр тора:

- Ойошма Учредителдәренең Дөйөм йыйылышы – Ойошманың иң юғары коллегиаль идаралыҡ органы;

Ойошманың Директоры – Ойошманың айырым шәхсән башҡарма идаралыҡ органы.

6.2. Ойошманың идаралыҡ органдары ваҡытлыса һәм өҙлөкһөҙ эшләүсе совет, комитет, комиссиялар, шулай уҡ эш һәм эксперт группалары төҙөргә хаҡлы.

6.3. Учредителдәрҙең Дөйөм йыйылышы үҙенең эшмәкәрлеген йәмғиәт башланғысында башҡара һәм уның төп функцияһы булып Ойошманың үҙ маҡсаттарын үтәүен тәьмин итеүе тора.

6.4. Учредителдәрҙең Дөйөм йыйылышының уға ғына тәғәйенләнгән компетенциялары булып түбәндәгеләр тора:

- Ойошманың уставын үҙгәртеү;
- Ойошманың эшмәкәрлегенең өҫтөнлөклө йүнәлештәрен, уның мөлкәтен булдырыу һәм ҡулланыуҙың принциптарын билдәләү;
- Ойошманың финанс планын раҫлау һәм уға үҙгәрештәр индереү;
- Ойошманың йыллыҡ отчетын һәм бухгалтер (финанс) отчетын раҫлау;

- федераль закондар тарафынан башҡа тәртип ҡаралмаған осраҡта, Ойошманың учредителдәре составына яңы ағзалар ҡабул итеү һәм сығарыу;
- Ойошма тарафынан икенсе юридик шәхестәр булдырыу, Ойошманың икенсе юридик шәхестәрҙә ҡатнашыуы, Ойошманың филиалдарын һәм вәкиллектәрен асыу;
- Ойошманың бөтөрөлөүе тураһында ҡарар ҡабул итеү, ликвидация комиссияһын, ликвидаторҙы һәм ликвидация баллансын тәғәйенләү;
- Ойошманың шәхсән аудиторын раҫлау;
- Ойошманың проекттарын финанслауҙың тәртибен һәм шарттарын раҫлау;
- Ойошманың Эксперттар Советының шәхсән составын раҫлау;
- Ойошманың Эксперттар Советы үткәргән экспертизаларын һәм башҡа һығымталарын ҡарау;
- Һайлап алынған проекттарҙы финанс менән тәьмин итеүҙең күләмен билдәләү, финанслау тураһындағы ҡарар алдараҡ ҡабул ителгән проекттарҙы финанс менән тәьмин итеүҙең күләмен үҙгәртеү, шулай уҡ уларҙы финанслауҙы туҡтатыу;
- Ревизия комиссияһын билдәләү һәм уның вәкиллек хоҡуҡтарын туҡтатыу;
- Ойошманың Директорын тәғәйенләү һәм уны вазифаһынан бушатыу.

6.5. Учредителдәрҙең Дөйөм йыйылышының ултырышы, әгәр йыйылышта уның ағзаларының яртыһынан күберәге ҡатнашһа, ҡарар ҡабул итергә хоҡуҡлы.

6.6. Учредителдәрҙең Дөйөм йыйылышының уға ғына тәғәйенләнгән компетенциялар буйынса ҡарары учредителдәрҙең 2/3 өлөшөнән күберәк булған күпселек менән ҡабул ителә һәм яҙма рәүештә теркәлә.

6.7. Ойошманың үҙе генә ҡулында тотҡан (единоличный) башҡарма идаралыҡ органы булып Учредителдәрҙең Дөйөм йыйылышы тарафынан биш йыллыҡ срокка тәғәйенленеүсе Ойошманың Директоры тора.

6.8. Ойошманың Директоры үҙенең эшмәкәрлеген Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы ҡануниәтенә, ғәмәлдәге Уставҡа, Учредителдәрҙең Дөйөм йыйылышының һәм

Ойошманың Попечителдәр Советының ҡарарҙарына, шулай уҡ Ойошманың эске локаль акттарына нигеҙләнеп башҡара.

6.9. Ойошма Директорының компетенцияларына түбәндәгеләр ҡарай:

- Ойошманың эшмәкәрлеген ойоштороу;
- Ойошма Учредителдәренең Дөйөм йыйылышы ҡарарҙары үтәлешен тәьмин итеү;
- Ойошма Учредителдәренең Дөйөм йыйылышынына Ойошманың эшмәкәрлеге тураһында даими рәүештә мәғлүмәт еткереү;
- Ойошма Учредителдәренең Дөйөм йыйылышынында ҡараласаҡ һорауҙарҙы әҙерләү;
- Ойошманың милеге менән идара итеү.

6.10. Ойошманың Директоры:

- Ойошма Учредителдәренең Дөйөм йыйылышы алдында отчет тота;
- Ойошманың ағымдағы эшмәкәрлеге менән етәкселек итә, Ойошманың төп маҡсаттарына ирешеүҙе, Ойошма Учредителдәренең Дөйөм йыйылышы һәм Попечителдәр Советы ҡарарҙарының үтәлеүен тәьмин итә;
- Ойошма Учредителдәренең Дөйөм йыйылышын раҫлаған Ойошманың финанс планына ярашлы Ойошманың структураһын һәм эшсәндәргә эш хаҡы түләү шарттарын раҫлай;
- Ойошма исеменән уны ышаныс ҡағыҙыһыҙ Рәсәй Федерацияһы территорияһындағы һәм сит илдәрҙәге бөтә учреждение, предприятие, ойошма, берлектәрҙә эш алып бара;
- Ойошма Учредителдәренең Дөйөм йыйылышына унда тикшерер һәм ҡарар ҡабул итер өсөн Ойошманың йыллыҡ бухгалтер (финанс) отчетын, Ойошманың йыллыҡ эшмәкәрлеге отчетын, Ойошманың йыллыҡ финанс планының үтәлеше отчетын һәм Ойошманың милкен ҡулланыу буйынса отчетты, шулай уҡ киләһе финанс йылында ойошманың эшмәкәрлеге йүнәлештәренә финанс саралары бүлеү буйынса тәҡдим әҙерләп индерә;
- штат теҙмәһенә ярашлы Ойошмаға эшсәндәр ҡабул итә һәм эштән бушата;
- Учредителдәрҙең Дөйөм йыйылышының уға ғына тәғәйенләнгән компетенцияларына ҡараған һорауҙарҙан тыш,

Ойошманың маҡсаттарына ирешеү өсөн кәрәк булған барлыҡ башҡа төрлө эштәрҙе башҡара;

- Ойошма исеменән Уставҡа ярашлы һәм үҙенең вәкәләттәре сиктәрендә килешеүҙәр, договорҙар төҙөй, ышаныс ҡағыҙҙары тапшыра, Ойошманың ағымдағы һәм административ-хужалыҡ эшмәкәрлеген үтәр өсөн банкта иҫәптәр аса;

- Ойошманың эске хеҙмәт тәртибен һәм Ойошманың эшсәндәренең вазифа бурыстарын, хеҙмәт килешеүҙәре шарттарын билдәләүсе Ойошманың эске документтарын раҫлай;

- Ойошманың милкен һәм финанс сараларын тотоноу өсөн яуаплы.

## 7. Ойошманың Попечителдәр Советы

7.1. Ойошманың Попечителдәр Советы Ойошманың финанс сараларын тотоноуҙы, милкен ҡулланыуҙы, шулай уҡ Ойошма тарафынан Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы ҡануниәтен үтәлешен контролдә тотоусы Ойошманың коллегиаль органы булып тора.

7.2. Ойошманың Попечителдәр Советының составы Башҡортостан Республикаһы башлығы тарафынан раҫлана.

Ойошманың Попечителдәр Советы үҙенең эшмәкәрлеген йәмғиәт башланғысында алып бара.

7.3. Ойошманың Попечителдәр Советы ағзалары ултырышта үҙ составынан Председатель һайлай.

7.4. Йөкмәтелгән функцияларҙы үтәү өсөн Ойошманың Попечителдәр Советы Ойошманың бөтә документтары менән танышырға, Ойошманың ойоштороу-идара итеүсе вазифалы кешеләренән, Ойошманың идара органдарынан аңлатмалар алырға хоҡуҡлы.

7.5. Ойошманың Попечителдәр Советы үҙенең ултырыштарын йылына бер тапҡырҙан да һирәк түгел, кәрәк булған осраҡта үткәрә. Ойошманың Попечителдәр Советы ултырышы, әгәр унда ағзаларҙың яртыһынан күберәге ҡатнашҡан осраҡта, ҡарар ҡабул итергә хоҡуҡлы. Ойошманың Попечителдәр Советы ултырышы ҡарарҙары ултырышта ҡатнашыусыларҙың күпселек тауышы менән ҡабул ителә. Ойошманың Попечителдәр Советының һәр бер ағзаһы бер тауышҡа эйә.

7.6. Ойошманың эшмәкәрлегендә хоҡуҡ боҙоу асыҡланған осраҡта, Ойошманың Попечителдәр Советы кисекмәҫтән Ойошма Учредителдәренең Дөйөм йыйылышы ултырышын саҡырыуҙы талап итеү мөмкинлегенә эйә.

## 8. Ойошманың Эксперт Советы

8.1. Ойошманың Эксперт Советы Ойошма проекттарына экспертиза яһау һәм уларға рекомендация биреү маҡсатынан сығып төҙөлә.

8.2. Учредителдәрҙең Дөйөм советы ҡарары менән Ойошманың Эксперт Советы составы 5 йылға тәғәйенләнә. Ойошманың Эксперт советы ағзаларына күренекле фән, мәғариф, мәҙәниәт, киң мәғлүмәт саралары, йәмәғәт эшмәкәрҙәре йәлеп ителергә мөмкин. Состав үҙгәртелергә лә мөмкин.

8.3. Ойошма Учредителдәренең Дөйөм йыйылышы ағзалары Ойошманың Эксперт Советы ағзаһы була алмай.

8.4. Ойошманың Эксперт Советы компетенцияларына түбәндәгеләр ҡарай:

- проекттарҙы һайлап алыу конкурстарының үткәреү тәртибен әҙерләү;
- башҡорт телен үҫтереүҙең һуңғы тенденцияларына ярашлы Ойошманың перспективалы программаларының исемлеген төҙөү;
- Ойошма программаларының проекттарын һайлап алыу процедураларын камиллаштырыу буйынса тәҡдим әҙерләү;
- башҡорт халҡының мәҙәниәтен, традицияларын һәм телен һаҡлау, пропагандалау, үҫтереүгә йүнәлтелгән программа һәм тәҡдимдәргә баһа биреү буйынса эксперт-аналитик эштәр үткәреү;
- Ойошманың аҡсаһы менән финанслауға дәғеүә иткән юридик һәм физик шәхестәрҙең проекттарына экспертиза яһау.

8.5. Ойошманың Эксперт Советы йылына кәмендә 1 тапҡыр йыйыла.

8.6. 2/3 өлөштән күберәк ағзаһы булғанда, Ойошманың Эксперт Советы йыйылышы тулы хоҡуҡлы тип һанала.

8.7. Йыйылыштың ҡарары йыйылышта ҡатнашҡан ағзаларҙың яртыһынан күбеһе яҡлап тауыш биргән осраҡта ҡабул ителә.

Ойошманың Эксперт Советы ағзаһы бер һорау буйынса бер тапҡыр тауыш бирә ала.

## 9. Учет һәм отчет

9.1. Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтенә ярашлы Ойошма үҙ эшмәкәрлегенә кәрәкле бухгалтерия, статистика һәм башҡа төрлө иҫәп-хисап эштәре алып бара.

9.2. Иҫәп хәле һәм ваҡытында отчеттарҙы тапшырыу өсөн яуаплылыҡ Ойошманың директорына һәм баш бухгалтерына йөкмәтелә.

9.3. Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтенә һәм ғәмәлдәге Уставҡа ярашлы Ойошма үҙенең эшмәкәрлеге хаҡында дәүләт статистика һәм һалым органдарына, учредителдәргә һәм башҡа заттарға мәғлүмәт еткерә.

## 10. Ойошманың ревизия комиссияһы

10.1. Ойошманың финанс эшмәкәрлеген контролдә тотоу Ойошманың ревизия комиссияһына йөкмәтелә. Ревизия комиссияһы Ойошманың финанс-хужалыҡ һәм устав буйынса эшмәкәрлеген контролдә тота.

10.2. 3 кешенән торған Ойошманың ревизия комиссияһын Ойошма Учредителдәренең Дөйөм йыйылышы 5 йылға тәғәйенләй.

10.3. Ойошманың ревизия комиссияһы үҙенең составынан Председателде һайлап ҡуя. Ойошманың ревизия комиссияһы ҡарарҙары күпселек тауыш менән ҡабул ителә.

10.4. Ойошманың ревизия комиссияһы компетенцияһына түбәндәгеләр инә:

- Ойошманың финанс-хужалыҡ эшмәкәрлеге тураһында документтарҙың Рәсәй Федерацияһы ҡануниәте һәм Ойошманың эске документтарына, шул иҫәптән договор һәм килешеүҙәр төҙөлгәндәренә, ярашлы булыуын тикшереү;
- Ойошманың эшмәкәрлеге тураһында йыллыҡ отчет һәм бухгалтерия учетын алып барыуҙы, финанс пландарҙың тормошҡа ашырылыу һәм милеген файҙаланыу отчеттары, Ойошманың норматив документтарына тап килгән Ойошманың йыллыҡ отчетын тикшереү;

10.5. Ойошманың ревизия комиссияһы Рәсәй Федерацияһы ҡануниәтенә һәм Устав нигеҙенә таянып эш итә.

10.6. Ойошманың финанс-хужалыҡ эшмәкәрлеге Ойошманың йыллыҡ эше һөҙөмтәләренән сығып тикшерелә. Шулай уҡ Ойошма финанс-хужалыҡ эшмәкәрлеген Ойошма ревизия комиссияһы, Ойошма директоры, Ойошма учредителдәренең Дөйөм йыйылышы һәм Ойошманың Попечителдәр советы инициативаһынан сығып тикшерелә ала.

## 11. Аудит

11.1. Йыллыҡ финанс отчетын тикшереү һәм раҫлау өсөн, Ойошма кәрәк тип тапһа, махсус индивидуаль аудитор менән килешеү төҙөп, уны йәлеп итә ала (тышҡы аудит).

## 12. Ойошманы үҙгәртеү (реорганизациялау) һәм уны ябыу (ликвидациялау)

12.1. Рәсәй Федерацияһының Граждандар кодексы һәм “Коммерцияға ҡарамаған ойошмалар тураһында” Федераль законында ҡаралған тәртиптә Ойошма үҙгәртелә ала.

Ойошма Фондҡа әүерелергә хаҡлы.

12.2. Ойошма ҡушылыу, берләшеү, айырылып сығыу, бүленеү һәм ҡайтанан төҙөлөү формаһында үҙгәртелергә мөмкин.

Үҙгәртеү тураһында мәсьәлә Ойошма учредителдәренең Дөйөм йыйылышы йәки суд менән хәл ителә.

12.3. Ҡушылыу формаһындағы үҙгәртеүҙән тыш, дәүләт теркәүенән башлап яңы барлыҡҡа килгән Ойошма үҙгәртелгән (реорганизацияланған) тип иҫәпләнә.

Ойошманы икенсе ойошмаға ҡушып үҙгәртеүҙән һуң берләштерелгән ойошма эшмәкәрлегенең туҡтатылыуы тураһындағы яҙыуҙарҙы юридик шәхестәрҙең берҙәм дәүләт реестрына индерелгәндән алып уның беренсеһе үҙгәртелгән тип һанала.

12.4. Үҙгәртелеп яңы барлыҡҡа килгән ойошманың эшмәкәрлеген туҡтатыу тураһындағы яҙыуҙарҙы юридик шәхестәрҙең берҙәм дәүләт реестрына индерелеүе һәм юридик шәхестәрҙең дәүләт теркәүе тураһындағы законда ҡуйылған тәртип буйынса үткәрелә.

12.5. Ойошманы үҙгәрткәндән һуң уның Уставы, лицензияһы һәм дәүләт регистрацияһы свидетельствоһы көсөн юғалта.

12.6. Ойошманы юҡҡа сығарыу түбәндәгесә хәл ителә:

- Ойошма учредителдәренең Дөйөм йыйылышы ҡарары менән;
- суд ҡарары менән.

Ойошманы юҡҡа сығарыу “Коммерцияға ҡарамаған ойошмалар тураһында” Федераль законы, Рәсәй Федерацияһының Граждандар кодексы һәм башҡа Федераль закондар менән ҡаралған тәртиптә ғәмәлгә ашырыла.

12.7. Ойошманы юҡ иткәндән аҙаҡ аҡса һәм башҡа милек объекттары бурыстарҙы түләүгә һәм Ойошма Уставының маҡсатына яраҡлы тотонола.

## 13. Ойошманың Уставына үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр индереү

13.1. Ойошманың Уставына үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр индереү ғәмәлдәге ҡануниәт менән ҡаралған тәртиптә теркәлә.

13.2. Ойошманың Уставына үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр индереү тураһындағы ҡарар Ойошманың Учредителдәре Дөйөм йыйылышында хәл ителә.